# «Азат Республикам» кластан тыш сара

1. – Хәйерле көн,ҡәҙерле ҡунаҡтар!
2. – Хәйерле көн, дуҫтар!
3. - Һеҙҙе ҙур байрам – Республика көнө менән ҡайнар ҡотлайбыҙ!

4.Башҡортостан – башҡорт иле,
Шунда беҙҙең тамырҙар.
Беҙҙең ҡайнар ҡаныбыҙҙа
Сал тарихтың даны бар.

5.Башҡортостан – башҡорт иле,
Торна булып сыңрар ил,
Сор ҡурайҡай һыҙҙырғанды
Ғаләм өнһөҙ тыңлар гел.

Йыр «Ватан»
(ҡурай тауышы аҫтында әкиәтә һөйләү)

6.Борон-борон заманда,
Урманда ла яланда,
Гөл-сәскәле аҡланда
Йәшәгән,ти,шат халыҡ.

7.Һунар иткән,балыҡ тотҡан,
Көтөү-көтөү йылҡы көткән,
Бейә һауып ҡымыҙ бешкән,
Йүкә һуйып арҡан ишкән,
Йөрөшкәндәр ҡунаҡҡа,
Яҡынға һәм йыраҡҡа.
Барлыҡ ырыу дуҫ йәшәгән,
үҙ ерен яҡлағандар,
Мөхитте һаҡлағандар.

8.Ләкин яуыз хандар килеп
Яһаҡ даулай башлағандар,
Көтөүлеген киткән тапап,
Урман ҡырҡып ташланған.
Һылыу ҡыҙҙарҙы урлаған,
Өлкәндәрен - хурлаған,
Еребеҙҙе алмаҡ булып

Аждаһалай дулаған.

9.Аҡһаҡалдар йыйылышып
Кәңәш- төңөш иткәндәр,
Дүрт ырыуҙың аҫылдары
Аҡ батшаға киткәндәр.

10.Илебеҙҙең бейҙәре
Күп бүләктәр алғандар,
Аҡ батшаға барғандар,
Бергә-бергә йәшәрбеҙ,тип
Унан вәғәҙә алғандар.

11.Халҡығыҙға һүҙ бирәм,
Ерегеҙгә һис теймәм,
Иркен көн күрерһегеҙ,
Тик яһаҡ бирерһегеҙ – тигән аҡ батша.

12.Беҙ ҙә бурыслы ҡалмабыҙ,
Һаҡлашырбыҙ ил сиген,
Халҡыбыҙ бәхетле булһын,
Тыныс булһын ер-күгем – тип яуаплаған
бейҙәр.

13.Минең халҡым дуҫлыҡ өсөн
Йәлләмәҫ көсөн-тирен,
Йәнен бирер күрше-күлән
Йәшәһен өсөн имен.

14.Ерен биргән,һыуын бүлгән
Күптәргә ауыр саҡта,
Улар өсөн шәфәҡ уты
Һүнмәй янған усаҡта.

15.Алтын көҙҙөң йәмле мәлендә, 1990 йылдың 11 октябрендә Башҡортостан суверенлы дәүләт тип иғлан ителде. Азат,суверенлы ил тәү тапҡыр үҙенең президентын һайланы.

16.1992 йылдың 25 февралендә республикабыҙҙың Флагы ҡабул ителә.

17.Башҡортостаным Флагы
Тора өс төрлө төҫтән:
Күк, аҡ, йәшел, ә уртаға
ҡурай сәскәһе төшкән.

18.Зәңгәр төҫө – ул халҡымдың
Уй-ниәте, сафлығы.
Аҡ төҫ – ул именлек төҫө,
Хеҙмәттәшлек, паклығы.

19.Ә йәшеле – ул азатлыҡ,
Мәңгелек йәшәү төҫө,
Суверенлы илдә генә –
Халҡым булмышы, көслө.

20.ҡурай сәскәһе – ете таж,
Нигеҙе – ете ырыу;
Бар милләттәр менән бергә
Бәхетле тормош ҡороу.

21.Республикамдың Флагы
Зәңгәр күктә талпына,
Бәхет юрай, шатлыҡ теләй
Бай тарихлы халҡыма.

22.1993 йылдың 12 октябрендә Башҡортостан Республикаһының Гимны, Гербы ҡабул ителде.

23.Бәхет өсөн күпме көрәшһәң дә,
Ғазап кисерҙең һин ғүмергә.
Хәҙер азат Башҡортостан булып,
Мәңгелеккә килдең һин ергә.

24.Башҡортостан – азат республикам,
Ниндәй иркен һәм бай еребеҙ.
Беҙ атларға тейеш ошо ерҙән
Хужа булып уға үҙебеҙ.

25.Башҡортостан – дуҫлыҡ йорто,
Берҙәмлектә уның ҡото.
Бергә-бергә булһаҡ ҡына,

Бәхет ҡошон булыр тотоп.

26.Бер туғандай яуҙарҙа ла,
Бер туғандай һабанда ла,
Бер туғандай табында ла
Булһаҡ ҡына, нығыр дуҫлыҡ
үтә алмаҫ аслыҡ,хаслыҡ.

27.Башҡортостан – дуҫлыҡ йорто,
Татыулыҡта уның ҡото,
Туғанлыҡта - уның нуры,
Тоғролоҡта – уның уты.

28.Мәңге йәшә, дуҫлыҡ иле!

29.Мәңге йәшә, Башҡорт иле!

Йыр «Башҡортостан – Гөлбостан»

30.Оран һалам башҡорт иленә:
Һатмаҫҡа тыуған ерҙәрҙе,
Бөтөрмәҫкә ҡош-ҡорттарҙы,
Бысратмаҫҡа шишмәләрҙе.

31.Оран һалам тыуған халҡыма:
Онотмаҫҡа туған телебеҙҙе,
Онотмаҫҡа ил тарихын,
Гәүһәребеҙ – нәҫел еребеҙҙе.

32.Күҙ йәшеләй саф һыуҙарҙан
Салауат атын эсергән,
Илен ирекле итәм тип
Күпме ыҙа-михнәт кисергән.

33.үҙе утта янһа-янған,
Урман-ҡырҙарҙы һаҡлаған,
Өҙөлөп һөйгән тыуған ерен,
Байлығыбыҙҙы һатмаған.

34.Ошо изге аманатты
Онотабыҙ һуң түгелме?

Күпме урман – сикһеҙ байлыҡ
Сит яҡтарға бит һибелде.

35.Ер-һыуыбыҙ китһә ҡулдан,
ҡайҙа һыйынырбыҙ һуң беҙ?
Урман-һыуҙарҙы ҡоротоп
Тороп ҡалабыҙ бит илһеҙ.

36.Оран һалам, башҡорттарым.
Хәстәрләйек көнөбөҙҙө.
Батыр Салауатыбыҙҙай
Һаҡлайыҡ ил-еребеҙҙе!

37.Һаҡлайыҡ ил-еребеҙҙе!